**Йәншишимә гәзите (Өфө калаһы), 25 март 2016 йыл**



# «Ауыл тәртиптә — ил ниғмәттә»

Ошондай девиз менән үтәсәк быйылғы Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу кампанияһы. Мөһим сара 1 июлдән 15 августа тиклем барасак. Ә алыҫта яткан, юлһыҙ биләмәләрҙә – 2016 йылдың 15 сентябренән 15 ноябренә тиклем.

Башкортостанстат хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, был эшкә 2 меңдән артык кеше йәлеп ителәсәк. Уларҙы махсус рәүештә укытасактар. Зәңгәр төҫтәге бейсболка, жилет (эмблемаһы ла бар) кейгән ағай-апайҙарҙы әллә кайҙан танырға була. Йәнә бланкылар һәм планшет һалынған зәңгәр сумка, бейджик һәм танытмалары ла бар.

Уҙған йылдар менән сағыштырғанда, иҫәп алыусылар һаны бер нисә тапкырға кәмейәсәк. Ни өсөн тигәндә, быйылдан башлап заманса технологиялар кулланыласак. Планшеттар мәғлүмәттәрҙе анығырак һәм тиҙерәк йыйырға мөмкинлек бирәсәк. Был королма һынау үткән инде. Иҫәп алыусылар уның кағыҙ анкеталарға карағанда күп яклап өҫтөн булыуын билдәләй. Программа һорауҙарҙы күрмәй үтеп китергә ирек бирмәй, уңайлы навигация системаһы белешмә мәғлүмәт менән эшләүҙе ябайлаштыра. Шулай ук иҫәп алыусылар элекке һымак косак-косак кағыҙҙар ҙа күтәреп йөрөмәйәсәк. Бер иҫәп алыусы ай ярым эсендә 460 урынды үтергә тейеш. Һорау алыу уртаса 30 – 40 минут вакытты аласак.

Башкортостанстаттың ауыл хужалығы иҫәбен алыу буйынса бүлек начальнигы Нурия Һәүбән кыҙы Хафизова әйтеүенсә, ауыл хужалығы иҫәбен алыу объекттары булып, 1 мең 234 ауыл хужалығы ойошмалары, 4 мең 790 крәҫтиән-фермер һәм шәхси хужалыктар, 31 мең 500 баксасылык, йәшелсәселек, дача берекмәләре тора.

Был мөһим сара ни өсөн үткәрелә? Иң тәү сиратта, илебеҙҙең киләсәген билдәләү өсөн. Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу ун йылға бер тапкыр уҙғарыла. Һуңғыһы 2006 йылда үтте. Ошо вакыт эсендә әллә күпме үҙгәрештәр булыуы мөмкин. Беҙ күпме еребеҙ бар, унда кемдәр эшләй, нимәләр етештерелеүен белергә тейешбеҙ. Шуларҙы иҫәпләп, яңы программалар төҙөлә һәм элеккеләренә төҙәтмәләр индерелә, мал һаны, аҙык-түлек етештереү күләме асыкланасак. Ә был киләсәктә һөҙөмтәле агросәнәғәт сәйәсәтен булдырыуға булышлык итәсәк.

Иҫәп алыуҙың тәүге йомғактары 2017 йылдың дүртенсе кварталында, ә һуңғыһы 2018 йылдың аҙағына билдәле буласак.

*Хәлиҙә* ***ЧЕМБАРИСОВА***